КОНКУРС ЭШКЫУАР ЧЕЛОВЕК ДЕЛА

Ватандаш

*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Бәхет сере

ОЧЕРК



*Эшкыуар Сәғит Исмәғилев*

Ил ырыҫын табырға
Атаң һиңә ҡот биргән,
Инәң һиңә һөт биргән.
*"Урал батыр" эпосынан*

Атаң һиңә ҡот биргән... Ғәжәп тә фәһемле һәм тылсымлы аманат! Уның асылы, минеңсә, йән биргән тигәнгә тап килә. Әйтемде дауам итһәк: йән биргәнгә — йүн биргән. Йүн иһә — кешенең көс ҡөҙрәте, рухи хәл-торошонан килгән үҙенсәлеге, эш атҡарыу әмәле. Ә йәшәү йүнен тапҡандар — ҡотло, ырыҫлы. Ҡот ул — тереклек, именлек, муллыҡ, бәхет. Шуға ла ҡәрҙәштәребеҙ изге теләк теләп, ҡотло булһын, ти. Ҡотло кешеләрҙең иһә йорто, донъяһы, ере, иле лә ҡотло. Беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа ла башҡорттарҙан төрлө эш атҡарыу мөмкинлектәрен тапҡан ҡотло ҡәрҙәштәребеҙ ишәйеүе милләтебеҙ, йорт-еребеҙ өсөн ырыҫ. Уларҙың көндән-көн күбәйеүе, ырыуға әйләнеүе яҡшы. Сәсәндәр әйткәнсә:

Һүҙ айышы — ырыуҙа,
Ырыулы ил ҡороуҙа.
Ырыулы ил — уҙғаны,
Ырыуһыҙ ил — туҙғаны.

Ҡотло ир-уҙамандарҙың берәүһе тураһында уның һабаҡташтарынан йыш ҡына ишеткеләй инем: Сәғит Рәми Ғарипов исемендәге Республика башҡорт гимназияһы ветерандарына ҡиммәтле бүләктәр биргән, Сәғит һәләтле егетте сит илгә уҡырға ебәреүгә ярҙам күрһәткән, Сәғит фәлән ғалимдың китабын нәшер иткән... Башҡорт эшҡыуарының изгелеге, шәфҡәтлелеге уның тураһында яҙыу теләген көсәйтте.

Республика башҡорт мәктәп-интернатын 1970 йылда тамамлаусыларҙың осрашыу кисәһендә таныштым мин Исмәғилов Сәғит Фәтҡлислам улы менән. Оҙон буйлы, мыҡты кәүҙәле, ҡалын мыйыҡлы, ҡуйы ҡашлы. Сөм ҡара костюм кейгән, ҡиәфәте бик тә күркәм, төҫ-сырайы етди.

Әңгәмәләшкәндә әллә ни һүҙ бирмәй, сәйәсәт, иҡтисад мәсьәләләре, донъя хәлдәре тураһында ғәмәлдә үҙе һөйләй, күп йәһәттән хәбәрҙар, мәғлүмәтле һәм дәхи үҙен дәрәжәле тота, минераль һыу ғына эсә. Һуңынан белеүемсә, байтаҡ йылдар спиртлы эсемлектәрҙе ауыҙына ла алмай икән. Йыш ҡына кесә телефоны шылтырап ҡуя, эшҡыуар үҙенең аныҡ күрһәтмәләрен бирә. Шундайыраҡ булалыр, күрәһең, ”яңы башҡорт”.

Уның йөҙ-ҡиәфәтендә мин Башҡорт ханды, Бөрйән, Тамъян батырҙарҙы, Кинйә абыз Арыҫлановты төҫмөрләгәндәй булдым, юлдаш, арҡадаш булырлыҡ ҡан ҡәрҙәш тип уйланым, сәсән теле менән әйткәндә, ”ергә ырыҫ сәстергән, илгә байман таптырған, һине ҡашҡа тип белдем”. Йәнтөйәге, ата-олатаһы, нәҫел-нәсәбе тураһында һорашып белешкәс, Сәғиткә дуҫтары алдында ошо шиғри ҡотлауҙы бағышланым:

Ҡан тартмаһа, йән тарта, ти
Йәнең тартҡан ереңә.
Ҡәрҙәштәрең шунда йәшәп,
Түл йәйҙергән иленә.
Исмәғил булған олатаң —
Хоҙанан һорап алған.
Ейәне бик тә бәхетле —
Ырыҫлы тормош ҡорған.
Исем-шәрифең фәһемле,
Затлы икән нәҫелең.

Оләсәләреңә тартып,
Яҡшылыҡ тик күңелең.
Яҙмышҡынаң насип иткән
Дуҫ-иштәрҙең күркәмен,
Йәнем-йәнәшем тиергә
Кәләштең иң гүзәлен.
Илле йәштә — ил ағаһы
Үренә менеп баҫтың.
Мәңге шулай шөһрәт менән
Донъя көтөргә яҙһын.

* * *

Көйөргәҙе төйәгенең Таймаҫ ауылында тыуып үҫкән Сәғиттең нәҫелзаты Бөрйәнгә ҡарай. Таймаҫ — Бөрйән олоҫо Янһары түбәһенең төп ауылы. Йәнә шул да мәғлүм: ”Борон заманда Янһары тигән бер кеше йәшәгән. Мал аҫрап, ете ерҙә йәйләгән, биш ерҙә ҡышлаған. Бик тырыш булған: көн тимәгән, төн тимәгән — эшләгән дә эшләгән. Шуға күрә лә етеш көн иткән”. Тырыш кеше алма, гөл баҡсалары үҫтерә, хатта хур ҡыҙылай хан ҡыҙына иш була. Ошо хаҡта Сәғит үҫмер сағында уҡ ғибрәтле хикәйәт ишеткәйне:

”Элек бер фәҡирҙең Мәүлихафиз тигән бер улы була. Һаҡлаусым, яҡлаусым булыр, тип теләп алғанға, уға ошондай исем ҡуша. Малай саҡтан уҡ Мәүлихафиздың йөрәге дәрт менән тулып, елкенеп тора. Бәләкәйҙән үк эш эшләп үҫә, бик уңған, матур, киң күкрәкле, ыласындай яурынлы егет булып етә. Нисек донъя ҡорорға, ҡотло тормош әмәлдәрен ҡайҙан табырға, тип уйланып йөрөгәндә, егет хандың берҙәнбер ҡыҙына үлеп ғашиҡ була. Сикһеҙ һөйөүе йөрәгенә көс-ҡөҙрәт бирә. Ошо дәрт-дарман менән ул хан һарайына барып керә. Хан алама кейемле егеткә үткенсегә ҡарағандай ҡарап тора ла:

— Эй, егет, һиңә ни кәрәк? — ти.

— Ханым-солтаным, һинең ҡыҙың хур ҡыҙылай сибәр, — ти Мәүлихафиз.

— Бик һәйбәт беләм, — ти хан. — Шунан ни әйтерһең?

Мәүлихафиз ҡаушамай-нитмәй йөрәген аса ла һала:

— Ханым-солтаным, ҡыҙыңа ғашиҡ бер әсирмен, уны миңә бир.

Хан егеткә көләмһөрәп ҡарап тора ла тәҙрәгә ымлай:

— Күрәһеңме, анауында бер таш түбә ҡалҡып тора. Үлән үҫмәҫ ҡаҡ түбә ул. Шул түбә алма баҡсаһы менән гөл баҡсаһына әүерелгәс, ҡыҙымды һиңә бирермен.

Ҡарап-ҡарап тора ла Мәүлихафиз әйтә:

— Ханым-солтаным, әгәр шул түбә алма баҡсаһына әйләнһә, Таңсулпаныңды миңә бирерһеңме, һүҙеңдә торорһоңмо?

— Бирермен, бирермен, — ти хан йылмайып. Ҡулын биреп вәғәҙә итә һәм егет артынан көлөп ҡарап ҡала.



*Сәғит ғаиләһе менән тыуған ауылында үҙе төҙөткән мәсет янында*

Мәүлихафиз сәмләнеп эшкә тотона. Түбәнең таштарын аҡтарып, ситкә ташый, таштар урынына ҡара тупраҡ килтереп һала. Шыбыр тиргә батып, көнө-төнө эшләй егет. Яҙ еткәс, түбә башына алмағастар ултырта, төрлө гөл-сәскәләр сәсә, йәмйәшел сирәм үҫтерә. Йәйен түбә һоҡланғыс баҡсаға әүерелә. Аллыгөллө сәскәләр хуш еҫ аңҡыта, уларға күбәләктәр, бал ҡорттары осоп ҡуна, сут-сут ҡоштар һайрай...

Йөҙө ҡояштай балҡыған егет хан янына килә:

— Ханым-солтаным, ҡуйған шартыңды үтәнем, Таңсулпаныңды миңә бир! — ти.

Хандың иҫе китә. Күҙҙәренә ышанмай, баҡсаны барып ҡарай. Яҡындан күргәс, тағы ла ныҒыраҡ хайран ҡала: юҡты бар итеп, мөғжизә ҡылып була икән дә! Хан ҡыйын хәлдә ҡала:”Ни хәл итергә? Ҡыҙҙы бирергәме? Бирмәҫкәме? Улай ҙа, былай ҙа оҡшамай. Бирһәң, был фәҡиргә ҡыҙ йәл, бирмәһәң, вәғәҙәләшелгән, вәғәҙә — иман. Ырыуҙаштары, хан һүҙендә тормай, тиер. Бирмәй сара юҡ”, —тип уйлай ҙа әйтә:

— Ҡыҙым һинеке булһын. Тик етеш һәм татыу донъя көт.

Шул көндө үк Таңсулпан менән Мәүлихафизды ҡушып, хан тирә-яҡты шаулатып туй үткәрә. Бар халыҡ егет үҫтергән баҡсаға хайран була. Хан ил-йортҡа йәм өҫтәп торған баҡсаның уртаһына күркәм һарай һалдырта, ҡыҙы менән кейәүен шунда сығара. Хур ҡыҙылай Таңсулпан менән киң күкрәкле эшһөйәр Мәүлихафиз бик бәхетле булып, дан итеп донъя көтә”.

* * *

Таңсулпан менән Мәүлихафиз һымаҡ, Сәғит менән Таңһылыуҙың көнитмештәре лә йәмле, етеш, бөтә нәмәләре мул, ҡыҙҙарының исеме лә — Таңсулпан. Хөр донъя ҡорғансы, әлбиттә, Сәғиткә лә ауыр һынауҙар тоторға, төрлө эштә үҙен һынап ҡарарға, әсе тир түгергә тура килә. 1-се башҡорт республика мәктәп-интернатында төплө белем алған, тиҫтерҙәре араһында математиканы шәп белеүе менән айыры-

лып торған, олимпиадаларҙа еңеү яулаған егет Өфө дәүләт авиация институтын уңышлы тамамлай. Шунан һуң абруйлы юғары белемгә эйә булыу ҡыуанысы менән дүрт йыл Өфө моторҙар эшләү заводында инженер-технолог вазифаһын башҡара. Мәгәр шуныһы ҡыйын: фатир юҡ, эш хаҡы әҙәмсә көнитмеш ихтыяждарын ҡәнәғәтләндермәй. Холҡо буйынса Сәғит яҙмышына буйһоноп, аҙға риза булып, баш эйеп йәшәй торғандарҙан түгел. Йәш, ғорур, дәрт-дарманы ташып тора. Бөркөт һымаҡ, ҡанаттарын йәйеп, бейектә, иркенлектә киң даирәне тойоп осоу кәрәк, үҙен-үҙе раҫларға кәрәк.

Донъя күреү — үҙе бер ғүмер, тип, Сәғит Себергә, Төмән өлкәһенә юллана. Уйы — Сургуттан, Уренгойҙан Европа тарафына нефть, газ үткәргестәр һуҙыуҙа ҡатнашыу, матди хәлен яҡшыртыу. Хыялдар ҙур, алда — күңелде елкендергән яңы донъя. Сәғит самолетҡа, йәнә вертолетҡа ултырып осоп, атай-олатай аяҡ баҫмаған төбәккә — Конда станцияһына барып етә. Хәҙерге заманда иҡтисад шауҡымы, кеше ҡулы ҡағылмаған урын юҡ, әлбиттә. Тәбиғәт байлыҡтары көндән-көн әүҙемерәк, әрһеҙерәк үҙләштерелә. Баштан-аяҡ ҡоралланып, мөмкин булғандың барыһы ла алына, һурыла. Энергетик һәм химик сеймал буларaҡ, нефткә айырыуса ихтыяж ҙур. Ул — тереклеккә көн һайын кәрәк эсәр һыу һымаҡ. Сәғит етәкләгән көйләүселәр бригадаһына Кондалағы станцияны нефть ҡыуыуға әҙерләп, дүрт айҙа файланыуға тапшырыу бурысы ҡуйыла. Егеттәр зирәклек, оҫоллоҡ күрһәтеп, эште ике ай ярымда атҡарып сыға.

Тундра, тайга — хозур тәбиғәт күренештәре генә түгел, эш кешеләренә юлһыҙ-ниһеҙ ҡара урман, йырып сыҡҡыһыҙ батҡыл, һаҙлыҡ. Айырыуса трассала эшләүселәргә ауыр. Һуларға һауа етмәй, йәйен — ләпәк, серәкәй, ҡышын — сатлама һыуыҡ. Вагондарҙа йәшәйҙәр, буръяҡ һыу эсәләр. Бындай шарттарҙа рухи көс, ныҡлы ихтыяр көсө кәрәк. Мәгәр Сәғиттең шуныһы күңеленә хуш: бөтә нәмәне үҙаллы хәл итәһең, бер-берендән шикләнмәйһең, шөрләмәйһең, теңкәңә тейеүсе, маҙаңды алыусы юҡ, бирелгән эште яҡшы итеп башҡараһың да файҙаланыуға тапшыраһың. Йөҙөң яҡты, күңелең тыныс, хеҙмәт хаҡың шөкөр. Тик йәнтөйәк, ҡан ҡәрҙәштәр генә ныҡ һағындыра. Һигеҙ йыл Себер мөхитендә нығынып, сыныҡып, Сәғит Исмәғилев Өфөгә ҡайта. Инде юҡбарға бирешмәй, рухи яҡтан көслө, сыҙамлы, сабыр. Хеҙмәт юлын башлаған Өфө моторҙар эшләү заводына бара. Ләкин эш хаҡы Себерҙәгегә ҡарағанда бында ун тапҡырға кәм. Уйлай, тоҫмаллай ҙа үҙаллылыҡҡа күнеккән егет үҙ шөғөлөн булдырырға тәүәккәлләй.

* * *

Ниндәй йүнәлештә эшләргә, ниндәй кәсеп-шөғөлгә тотонорға? Байҡай, эҙләнә, Өфө магазиндарын йөрөп сыға Сәғит. Спорт кәрәк-ярaҡтары иҫәпкә бар һанға юҡ та баһа! Ныҡлы фекергә килеп, теннис өҫтәлдәре һәм башҡа нәмәләр яһарға ҡарар ҡыла, чертеждарын һыҙа. Урман хужалығынан бурса, таҡта, агрегат заводынан металл, фурнитура белешә, буш торған подвалды арендаға ала һәм, ете оҫтаны йәлеп итеп, үҙ кооперативын асып ебәрә. Спорт магазиндары иһә килешеү нигеҙендә тауарҙарын бик теләп һата.

Илдә төҙөлөштө йәнләндереү, төҙөлөш менән шөғөлләнгән ойошмаларҙы дәртләндереү, уларға һәр йәһәттән ярҙам күрһәтеү буйынса ҡарар сыға. Шуға ярашлы Сәғит Фәтҡислам улы ла шөғөлөн үҙгәртеп ҡора. Инде уның йөҙ егерме кешене берләштергән ”Ракета” кооперативы ”Башнефть” идаралыҡтарында капиталь ремонт, автобазаларға реконструкция яһай, Благовещен, Бөрө, Яңауыл райондары хужалыҡтарында торлаҡ йорттар төҙөй. Шулай уңышлы, табышлы ғына эшләп йөрөгәндә һалымдар арта һәм эшҡыуарҙар ифрат та көсөргәнешле хәлдә ҡала, күптәр бөлә, төшөнкөлөккә бирелә.

Быңдай саҡта ни эшләргә, ни ҡылырға? Баш ҡайнай, йөҙ һорау йөҙәтә. Ҡырағай баҙар шарттарында юғалып ҡалыуың, бурысҡа батыуың да ихтимал. Сәғит предприятиеларҙа була, етәкселәр менән осраша, ихтыяждарын белешә һәм ауылдашы Байрас Айытбаев менән берлектә сауҙа-сәнәғәт фирмаһы аса. Фирма Башҡортостан ҡулланыусыларын кәрәкле ҡорамалдар, йөк машиналары менән тәьмин итә башлай. Ҡаҙағстандан, Украинанан, Санкт-Петербургтан, Мәскәүҙән алып килә. Халыҡ хужалығы тауарҙарын күмәртәләп һатыу менән дә шөғөлләнәләр. Артабан ҡаҙылма байлыҡтарҙы үҙләштереү шөғөлө менән мәшғүл ”Ватан” корпорацияһында ла эшләп алалар. Арып армаһыҙ булғансы эш ҡыйрата егеттәр. Тотороҡлолоҡ, ныҡлыҡ урынлашмаған, үҙ асылын таба алмаған илдә эшҡыуарлыҡты үҫтереү, уның даирәһен киңәйтеү еңелдән түгел шул. Сәғиткә лә өйөрмәләрҙә, ҡойондарҙа ҡалырға, бәлә-казаларға тарырға тура килә. Мәгәр өмөт-теләген һүндермәй. Күптәр ҡыҙыу баҙар ҡуҙында ҡурыла, ел-дауыллы ғәрәсәтендә һына, өҙөлә, йолҡона. Иң түҙемлеләр, ғәйрәтлеләр, зиһенлеләр генә, әкиәттәге батыр һымаҡ, ҡайнар һыулы ҡаҙандан тағы ла йәшәреп, күркәмләнеп, ҡөҙрәтләнеп сыға һәм моратына ирешә.

Көнө-төнө тир түккән, уның бер тамсыһын мең алтын иткән эш кешеләре, хеҙмәт батырҙары утта ла янмай, һыуҙа ла батмай. Шундай ир-уҙаман Сәғит Исмәғилев 1995 йылда үҙенең ”Исмәғил” компанияһын ойоштора. Ул сәнәғәт тәғәйенләнешендәге тауарҙарҙы тулайым һатыу, энергетика, газ тармаҡтары өсөн ҡорамалдар ҡуйыу менән шөғөлләнә, яйлап төҙөлөш эштәрен дә йәйелдерә. ”Башкирэнерго”ның ял базаһын, район электр селтәрҙәре идаралыҡтары, Учалы дәүләт һалым инспекцияһы биналарын үҙгәртеп ҡора, Әбйәлилдә суд приставтары йортон, Күмертауҙа күп ҡатлы торлаҡ йорт һалыуҙа ҡатнаша, Өфөлә, райондарҙа пекарнялар төҙөп һата.

— Экологик хәрәкәткә, тирә-яҡ мөхитте тергеҙеү эшенә лә ҡушылып киттек, — тип һөйләй Сәғит Фәтҡислам улы. — ”Башнефть” менән берлектә Татарстанда нефть ҡалдыҡтарын эшкәртеп, уларҙың урындарын таҙартып, хужалыҡтарға ҡайтарҙыҡ. Башҡортостанда ла ошондай ерҙәрҙе таҙартыуға тотонмаҡсыбыҙ. Эш ғәйәт күп, дарманың ғына етһен.

— Дарман тигәндәй, Сәғит дуҫ, киләсәктә башҡорт иленең, халҡының яҙмышы, булмышы, торошо үҙ эшҡыуарҙарының, йәғни башҡорт байҙарының ырыҫлылығына, күплегенә бәйле буласаҡ. Ҡанбабалар төйәгендә ҡытайҙар, вьетнамдар һәм башҡалар түгел, аҫаба башҡорт үҙе хужа, баш булырға тейеш.

— Эйе, тап шулай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, башҡорт ир-егеттәре араһынан әлегә утыҡҡан эшҡыуарҙар бик аҙ. Улары ла аралашмай, бер-береһенә булышлыҡ ҡылмай ине. Шуға ла Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендә Координация советы төҙөнөк, булдыҡлы йәштәрҙе эшҡыуарлыҡҡа йәлеп итеү бурысын ҡуйҙыҡ. Юғары уҡыу йорттарында уҡығандар диплом практикаһын танылған эшҡыуарҙарҙың компанияларында үтһен, уҡып бөткәс, шунда эшкә килһен. Булған башҡорт эшҡыуарҙарын туплап, берлектәге проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу ҙа мөһим. Ундай проекттар төҫмөрләнә лә инде.

”Исмәғил” компанияһы төҙөлөш эштәренә конкурс нигеҙендә ун бишләп подряд ойошмаһын йәлеп итә. Ҡуйылған шарттар — тәжрибә, сифат, эш һөҙөмтәһе, үҙкиммәт. Ошо талаптарға яуап бирәһең икән — төҙөлөшкә тотон! Компания баш ҡалабыҙ Өфөлә элекке ”Колос” ҡунаҡханаһы урынында сауҙа-эшҡыуарлыҡ үҙәге төҙөй. Проекты иң яҡшы проект баһаһына лайыҡ. Беренсе, икенсе ҡаттарында — магазиндар, өҫкө ҡаттарында — офистар.

Берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт, тигән аҡыл эйәләре. Ҡәрҙәштәр һүҙенә ҡолаҡ һалып, бер-береңә терәк булып, бергә-бергә йәшәү ырыҫлыраҡ, ҡотлораҡ. Һәр башҡорт эшҡыуарының үҙ хеҙмәт юлы, тәжрибәһе, әйтер һүҙе, кәңәше бар. Үрнәк булыу, фәһем биреү, фатиха алыу — үҙе изге эш. Йүнселдәрҙе бизнесҡа ылыҡтырыу — көнүҙәк мәсьәлә. Сит яҡтарҙан ябырылыусыларға, Башҡортостаныбыҙҙың байлыҡтарын умырырға тырышыусыларға үҙебеҙҙең эшҡыуарҙар, үҙебеҙҙең яңы башҡорттар ғына ҡалҡан була ала. Сәғит Исмәғилев — ошондай ныҡлы ҡалҡан, йорт-еребеҙҙе ҡурсыусы, ҡот-ырыҫыбыҙҙы, милли йөҙөбөҙҙө һаҡлаусы ҡаһарман.

Эшҡыуар ҙур теләк һәм ихласлыҡ менән башҡорт тарихын яҡтыртыуға, мәҙәниәтен, телен үҫтереүгә бәйле сараларҙы финанслай. Тарихсылар Салауат Ғәлләмовтың ”Бөйөк Һәүбән”, Элтон Донеллиҙың ”Рәсәйҙең Башҡортостанды яулап алыуы”, телсе Мөхтәр Әхтәмовтың

*Мәккәгә сәфәр. Хаж ҡылыу*



”Башҡорт теленең кире һүҙлеге” китаптарын нәшер итеүгә аҡса бүлгән. Студенттарға сит илдәрҙә күнекмә үтергә, башҡорт эстрада төркөмдәренә музыка ҡоралдары, затлы кейемдәр алырға, бокс буйынса Төхфәт Аслаев исемендәге ярыштар үткәрергә, Көйөргәҙе, Йылайыр райондары балалар баҡсаларына, Рәми Ғарипов исемендәге Республика башҡорт гимназияһына даими ярҙам күрһәтә, тыуған ауылы Таймаҫта кирбестән мәсет төҙөткән. ”Эштәрең сауаплы, тормошта ҡылған игелектәрең, яҡшылыҡтарың Аллаһы тәғәлә, халыҡ рәхмәте булып үҙеңә ҡайтыр, үҙеңде мең бәләнән ҡотҡарыр”, — тиҙәр. Әйткәндәй, Сәғит ҡатыны Таңһылыу, ҡыҙы Таңсулпан менән Мәккәгә сәфәр барып, пәйғәмбәрҙең юлынан йөрөп, Ҡәғбәне күреп, изге урындарҙы хаж ҡылып ҡайтты. Шунан һуң Сәғит хажи Исмәғилев тура юлға баҫҡан һәм баҫыусы милләттәштәренә намаҙ уҡыу тәртибен өйрәткән йыйынтыҡ нәшер итте.

Сәғит Фәтҡлислам улы аҡ бәхете асылып, эше, тормошо уңайға китеп, бөтә яҡтан теүәл, камил булып, ҙур ҡәнәғәтлек, шатлыҡ кисереп ғүмер иткән ир-уҙаман. Ғаилә тормошо ла бәхет менән тулы. Пар күгәрсендәр кеүек гөрләшеп, башҡаларға үрнәк күрһәтеп йәшәйҙәр. Таңһылыу, ҡыҙы Таңсулпан да ғәжәп моңло сихри тауыш менән башҡорт халыҡ йырҙарын йырлай, яҙғы ләйсән ямғыр үткәндәй, күңелдәр сафланып, йәшәреп китә.

Ир-азамат менгән күк юрғаның
Бәкәлдәре уның аҡ булыр.
Аҫыл егет ҡайҙа йөрөһә лә,
Ҡылған эше уның хаҡ булыр.

* * *

Ир-егеттәрҙең солтаны һәм бик тә йүнсел эш кешеһе генә ҡәрҙәштәре һоҡланыр уңыштарға, уларҙың рәхмәтенә өлгәшә. Халыҡ әйтмешләй, хеҙмәт төбө — хазина, тырышҡанға дәүләт бар. Эшле кеше генә — көслө кеше, эш менән үткән ғүмер генә — алтын ғүмер. Ғүмер, хеҙмәт юлында Сәғит шуны яҡшы аңланы:

Эш эшләүҙә икән бөтә хикмәт,
Шуға кәрәк һәр даимда эш эшләмәк.
Эшләгән һис ваҡытта хур булмаҫ —
Эштән ҡасҡан һис ваҡытта ҙур булмаҫ.
Эшләнгән эш — эште эшләгән иргә ҡот,
Эшләгән эш, һәйбәт булһа, илгә ҡот.
Эш эшләмәй, тирен түкмәй үткән ғүмер
Шуға хисап: ул — ни бары утһыҙ күмер.

Халыҡ аҡылынса, үҙ көсөңдө һалмай, әсе тир түкмәй бәхет килмәй. Бәхеттең сере — хеҙмәт. Эш өҫтөндә тамған тирҙең бер тамсыһы — мең алтын. Тырышып эшләгән һайын, тир тамсыларыңды күберәк түккән һайын ырыҫың артыр. Шул саҡта донъяла иң бәхетле, иң бай кеше булырһың. Йәнә шуны ла йәнең, тәнең менән аңлау кәрәк: ҡотло эшҡыуар булыу — ул үлән үҫмәҫ ҡаҡ түбәне йәм-йәшел сирәмгә, алма баҡсаһы менән гөл баҡсаһына әүерелдереүгә тиң.